ПУБЛИЦИСТИКА

*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# АСЫЛДАРҘЫ АСТЫ АРҠАЙЫМ

***Тарихи-фәлсәфәүи очерк***



*Арҡайымдың күктән күренеше*

Бик боронғо замандарҙа Көньяҡ Уралды һинд-европа, иң тәүҙә һинд-иран телдәре ғаиләһенә ҡараған халыҡтар, йәғни арийҙар ҙа төйәк иткән. Уларҙың көнитмеше тураһындағы матди сығанаҡтарҙы археологтар хәтһеҙ йылдар буйы эҙләне. Ниһайәт, 1987 йылдың йәйендә Урал тауҙарының көнсығыш битләүҙәрендә, тарихи Башҡортостан ерендә, хәҙерге Силәбе өлкәһе биләмәһендә урта бронза быуаты комартҡыһы Арҡайым торағы асылды.

Билдәле булыуынса, арийҙар — бөйөк рухи ҡиммәттәрҙе барлыҡҡа килтереүселәр, донъяны танып белеүгә булышлыҡ итеүсе оло мираҫ ҡалдырыусылар. Беҙҙең эраға тиклем унынсы быуатта тыуған һинд әҙәбиәте комартҡыһы ”Ригведа” боронғо һинд тарихын һәм мифологияһын өйрәнеүҙә әһәмиәтле сығанаҡ. Боронғо иран комартҡыһы ”Авеста” — зәрдөштилек (зороастризм) дине мәлендәге изге китаптар йыйынтығы — ҡиммәтле рухи мираҫ.

Зәрдөштилек дине беҙҙең эраға тиклем 600 йылдан алып беҙҙең эраның 300 йылына тиклем дауам иткән. Ул боронғо һәм иртә урта быуаттарҙағы Урта Азияла, Иранда, Афғанстанда, Әзербайжанда, Яҡын һәм Урта Көнсығыштың байтаҡ илдәрендә таралған. Динден исеме Зәрдөшт илаһ (Заратустра, Заратуштра) исеменән алын-

ған. Абруйлы инглиз ғалимы Мери Бойс фаразлауынса, Зәрдөшт Волганан көнсығышта, Азия далаларында йәшәгән. Изге ҡануны, ҡағиҙәләре ”Авеста”ла яҙылған. Уның төп ҡарашы, асылы — баш алла Ахурамаздаға ышаныу, ике мәңгелек башланғысты — изгелек менән яуызлыҡты ҡаршы ҡуйыу, уларҙың көрәше, донъя барышы эстәлеген тәшкил иткәнен күрһәтеү, ахырҙа изгелектең еңәсәгенә ышаныу. Зәрдөштилектең төп дини йолаһы — ут, донъяны яҡтыртыусы, ҡурсалаусы һәм һаҡлаусы. Арҡайымда һәм ”Ҡалалар иле”ндә йәшәгән ҡәүемдәр ҙә утҡа табынған. ”Мин шуға ышанам, — ти ”Ҡалалар иле”н тикшереүсе Геннадий Зданович, — ”Ригведа”ның һәм ”Авеста”ның тәүге текстары телдән Һынташлы — Арҡайым осоронда Көньяҡ Урал аръяғында тыуған”.

Күренекле башҡорт тарихсыһы Салауат Ғәләмовтың фекере лә иғтибарға лайыҡ: ”Археологтар тапҡан мәғлүмәттәр, Арҡайым ҡаҙылмалары һәм Һынташлы ерләү йолалары Куру ведик һинд-арийҙарының боронғо һинд-арий ҡәбиләләре Көньяҡ Уралдан Төньяҡ Һиндостанға, Пенджабҡа, Иран ҡалҡыулығына, Месопотамия-Курдистанға күсенеүҙәрен раçлай. Милли мифологияһы нигеҙендә уларҙың философияһы һәм сәнғәте тыуған. Был беҙҙең эраға тиклемге II меңйыллыҡта булған. Һинд-арийҙарҙың киреһенсә Көньяҡ Уралға күсенеүҙәре тураһында бер ниндәй мәғлүмәт юҡ.

Йыл һайын Ерҙең — Уралдың үлеүен һәм яңынан тыуыуын һүрәтләгән башҡорт героик эпосы ”Урал батыр” бөтә һинд-герман философияһының тарихи төп нөсхә рухи нигеҙе булып тора ла инде. Ул — бөтә Евразия һәм Рәсәй халыҡтары өсөн башҡорттар меңәр йылдар буйы һаҡлаған философик фекер хазинаһы.

Шулай итеп, бронза быуатынан башлап һәм һуңғы урта быуат менән тамамлап, Көньяҡ Уралдың этник картаһы шуны күрһәтә: үҙенең культураһы, мифологияһы, философияһы, этикаһы, эстетикаһы, фольклоры менән башҡорттар көнсығыш һинд-арий һәм көнбайыш боронғо эллин культураһын бәйләп тороусы быуын булған... Башҡорттар үҙҙәре Уралдың көньяҡ тау тармаҡтарын Ирәндек тип атай һәм ул санскрит теленән тәржемә иткәндә ”Иран иле” тигәнде аңлата...”

Беҙҙең заманда, йәғни егерменсе быуат аҙағында Арҡайым археологик ҡомартҡыһының табылыуы Евразия тарихына башҡаса ҡарарға, үткәндәр тураһында ғына түгел, киләсәк тураһында ла етди уйларға мәжбүр итте. Европа менән Азия осрашҡан ерҙәге, сал Уралдың буш ятҡан уйһыулығындағы ғәжәп асыш бөтә донъя кимәлендәге ваҡиға булды һәм унда тарихи-археологик үҙәк барлыҡҡа килде.

Биләмәһе ҙур булмауға ҡарамаçтан, Арҡайым, Таналыҡ, Һынташлы, Аланд һымаҡ ныҒытылған үҙәктәрҙе шартлы рәүештә ”тәүге ҡалалар” (протогорода) тип атайҙар. Сөнки улар бик ентекле планлаштырылышы, йыйнаҡлығы, уңайлылығы, архитектураһының мөһабәтлеге, һаҡланыу ҡоролмаларының ҙурлығы, көнкүрешенең һәм хужалығының ойошторолошо менән

айырылып тора. Арҡайым беҙҙең эраға тиклемге III мең йыллыҡ башындағы нығытылған үҙәктәрҙән берәү генә түгел. Аэрофотоһүрәттәр, йәғни самолеттан фотоға төшөрөү һөҙөмтәһендә Арҡайым тибындағы егермеләп нығытылған үҙәк асыҡланды һәм шартлы рәүештә ”Ҡалалар иле” тап аталды. Улар Урал һыртының көнсығыш итәктәре үҙәндәренән Көнбайыш Себер киңлектәренә тиклем арауыҡта, Яйыҡ һәм Тубыл йылғалары һыу айырғыстарында урынлашҡан. Йәғни хәҙерге Силәбе өлкәһенең көньяҡ биләмәләре һәм уға сиктәш Башҡортостан, Төньяҡ Ҡаҙағстан һәм Ырымбурҙың көнсығыш яғы ерҙәре. Үсемлектәр һәм тереклек донъяһы күп төрлө был төйәктә һинд-европа, төрки, уғыр халыҡтары ҡатышып йәшәгән һәм матди, рухи яҡтан бер-береһен байытҡан. Бынан Азия менән Европаның сауҙа юлдары үткән. Хужалыҡ кәрәк-яраҡтары менән алыш-биреш иткәндәр. Көнбайыш Себергә таштан, баҡырҙан яһалған ҡоралдар ебәрелгән.

Тикшереүселәрҙең иҫәпләүенсә, ”Ҡалалар иле”ндәге нығытылған үҙәктәрҙең араһы ҡырҡ-алтмыш саҡрымға еткән. Әйләнә-тирәлә үҙәктәргә бәйләнешле нығытылмаған тораҡтар, хужалыҡ итеү урындары, баҡыр рудниктары, зыяраттар булған. Нығытылған үҙәктәрҙең күплегенә ҡарамаҫтан, Арҡайым бронза дәүерендә йәшәгән кешеләрҙең көнкүрешен, ышаныуҙарын, табыныуҙарын сағылдырған ғәжәп үҙенсәлекле лә һәм изге лә урын.

Герман халыҡтарының телдән һөйләнгән, ҡулъяҙма килеш XIII быуаттан һаҡланған боронғо мифологик һәм героик йырҙарҙан тупланған ”Өлкән Эдда” йыйынтығындағы ”Хлёд тураһындағы йыр”ҙа Архайм торағы тураһында әйтелеүе айырыуса иғтибарҙы йәлеп итә. Арҡайымға бәйләп, был мәғлүмәт тәү тапҡыр телгә алына. ”Өлкән Эдда” — бөтә донъяға билдәле эпос. Унда сағылған ваҡиғалар гундар, йәғни төркиҙәр һәм уғырҙар, беҙҙең ҡанбабалар тарихына ла бәйле:

...Хлёд родился
в гуннской земле,
в священном лесу
с ножом и мечом,
остро отточенным,
в шлеме украшенном,
в длинной кольчуге
и с резвым конем.

Хлёд — готтар короле Хейдрек менән Хумлиҙың (Аттила) әсиргә алынған ҡыҙының улы, Ангантюрҙың (ата бер, инә башҡа) туғаны. Ул гундар ерендә үҫкән. Белешмә өсөн әйтеп үтәйек, гундар II—IV быуаттарҙа төрки телле һундарҙан, урындағы уғырҙарҙан һәм сарматтарҙан барлыҡҡа килгән яңы күсмә ҡәүем. IV быуаттың 70-се йылдарында уларҙың көнбайышҡа ҡарай ҡеүәтле хәрәкәте халыҡтарҙың бөйөк күсешенә этәргес була. Байтаҡ ҡына герман ҡәбиләләрен һәм башҡаларҙы берләштереп, гундар ҡеүәтле ҡәбиләләр берләшмәһенә етәкселек итә, башҡа илдәргә бөлдөргөс сапҡындар яһай: Көнсығыш һәм Көнбайыш Рим империяларына, Галлияға һ.б. Айырыуса Аттила мәлендә. Ул — 434 йылдан гундарҙың юлбашсыһы. Ш.Сефероглу менән А.Мюдеррисоглуҙың ”Төрки халыҡтары

дәүләттәре” хеҙмәтендә билдәләнеүенсә: ”Гундарҙың көнбайыш (Европа) империяһы биләмәләре һәм сиктәре: Көнъяҡ Рәсәй, Румыния, Югославияның төньяҡ райондары, Венгрия, Австрия, Чехословакия, Германияның көньяҡ һәм үҙәк райондары. Яҙмаһы — орхон төркиҙәре алфавиты. Яҙма теле — төрөк, гот, латин, грек телдәре”. 451 йылда Каталаун яландарындағы алышта гундар ҡыйратылып, уларҙың Көнбайышҡа үтеп инеүе туҡтатыла. Ике йылдан Аттила үлә. Унан һуң (469 йыл) ҡәбиләләр берләшмәһе тарҡала. Күреүебеҙсә, беҙҙең ҡанбабалар борон герман ҡәбиләләре менән аралашып, берләшеп йәшәгән. Быны, тарихи күренеште, хәлде бер кем дә инҡар итә алмай.

Готтар иһә — герман ҡәбиләләренең бер төркөмө. Көнбайышта йәшәгәндәре — вестготтар, көнсығыштағылары остготтар тип аталған. ”Хлёд тураһындағы йыр”ҙа готтарҙың, йәғни остготтарҙың Архайм торағында донъя көтөүе бик асыҡ әйтелә:

Хлёд с востока,
наследник Хейдрека,
в Архайм, к жилищу
готов приехал, —
наследье свое
собирался требовать.
Тризну там Ангантюр
правил по Хейдреку.

Был юлдарҙан аңлашылыуынса, гундар Архаймдан көнсығышта көн иткән. Хлёд гундар еренән готтар йәшәгән Архайм торағына вафат булған атаһы Хейдректы иҫкә алыу мәжлесе (тризна) мәлендә, үҙенең мираҫын талап итергә килгән.

Был ваҡытта гундар менән Хумли (Аттила), готтар менән Ангантюр етәкселек иткән:

Хумли, как слышно,
гуннами правил,
а гаутами — Гицур,
Ангантюр — готами...

Хлёд туғаны Ангантюрҙан атаһынан ҡалған мираҫтың яртыһын талап итә:

...Я хочу половину
наследия Хейдрека.
...Камень чудесный
в излучинах Данпа.

Һоҡланғыс таш (ҡая) гундар менән готтар биләмәләренең сигендә булған. БВЛ серияһындағы ”Өлкән Эдда. Нибелунгтар тураһында йырҙар” томында (М., 1973) Архаймға, уның ҡайҙа урынлашыуына шундай аңлатма бирелә: ҡайҙалыр көнсығышта, Данп йылғаһынан алыҫ түгел, йылға буйындағы тораҡ. Арҡайым торағын һәм уның тибындағы ”Калалар иле”н асҡансы, Архайм Днепр йылғаһы буйында урынлашҡан тип уйланылды. Беҙгә иһә бөгөлөндә ғәжәп таш ҡаялы Данп боронғо замандарҙа уҡ киң билдәле Яйыҡ йылғаһы булып күҙаллана. Боронғо грек астрономы Клавдий Птолемей (беҙҙең эраның II быуаты) һәм фламанд сәйәхәтсеһе Виллем Рубрук (1254) Яйыҡты Даикс, ғәрәп илгиҙәре Ибн-Фаҙлан (921—923) Джайк, Византия тарихсыһы Менандр (VI быуат) Ҙайх тип яҙып ҡалдырған, ”Авеста”ла Деик тиелгән. Данп йылғаһы Даикс, йәғни Яйыҡ булып сыға. Әйткәндәй, Арҡайым Яйыҡ йылғаһынан әллә ни алыҫ түгел, тура үлсәһәң, ни бары 35 саҡырым самаһы. Ҡыҙыл йылғаһы Яйыҡҡа ҡушылған урында



*Аркайым үҙәнендә*

налыҡ кеүек ҡаласыҡтар юҡ. Дунхейд, бәлки, Танхайм — Таналыҡ мәғәнәһендәлер. Таналыҡ йылғаһы бар, һәм хәҙерге Хәйбулла районы ерендә Арҡайым кеүек Таналыҡ ҡаласығы табылды. Тимәк, Дунхейд иле — ул Танхайм, йәғни Таналыҡ ере һәм иле. Дюльгья — Дю-йылға, Ёссур тауҙары иһә Йәнсура, Ейәнсура тигәнде аңлатыуы ла ихтимал.

һоҡланғыс ҡая ла ҡалҡып тора. Данп йылғаһын Танып, йәиһә Таналыҡ тип уйларға ла була. Хәйбулла районының Таштуғай ауылы эргәһендә, Таналыҡ буйында даға әҙҙәре уйылған серле таш ҡая, Белорет районында Ағиҙел йылғаһы буйында Ар ташы ҡаяһы ла бар...

Готтарҙың Архайм, Танхайм кеүек тораҡтарының биләмәләрен гундар баҫып алған. Гауттарҙың башлығы Гицур гундарҙы һуғышҡа саҡырған:

...Зову я вас к Дюльгье,
на битву сзываю
на Дунхейд, в пределы
Ёссурских гор!..

Гауттар — төньяҡ герман ҡәбиләһе төркөмө. Һуңынан ”Гаут йорто”нда йәшәүселәр Балтик буйына китә, шведтар менән алыша, Готланд утрауын үҙләштерә.

Географик атамалар ошолай аңлатыла: Дюльгья, йәғни Дю-юльгья — көнсығыштағы Ёссур тауҙарындағы билдәһеҙ йылға; Дунхейд, йәғни Дунхейм (Танхайм) — Дун йылғаһы буйындағы, Ёссур тауҙарындағы ил. Дун — Дон, Днепр йылғалары тип фаразларға мөмкин. Мәгәр унда Арҡайым, Та-

Архайм (Арһайм) — Ар йорто, йылға башында арҙар, арыу кешеләр йәшәгән ил. Архайм — үҙәндәге һыу баҫмаған ҡалҡыу ҡоро урын, утрау. Мифологияға нигеҙләнгән ”Урал батыр” эпосында ла Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең тирә-яғын һыу уратҡан урында йәшәүе һүрәтләнә:

Борон-борондан
Кеше-маҙар булмаған,
Килеп аяҡ баҫмаған,
Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән,
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Булған, ти, бер урын.
Унда булған, ти, борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт менән
Йәнбикә тигән ҡарсыҡ.

Көньяҡ Уралдағы Арҡайым торағы ла йылғалар буйында, яҙын һыу баҫҡан үҙәндең ҡалҡыу урынында, ҡоро ерендә урынлашҡан. Утрау — ер йөҙөн, тирә-йүндәге һыу-диңгеҙҙе сағылдырған. Оло Ҡараған йылғаһы үҙәне, утрау тирәләй һыу баҫыр туғайҙар, ер менән күкте бүлгәндәй иткән тау һыҙаттары был урынды тәү яралыу төйәге һымаҡ тойҙорған.

Йәнә, тикшерһәң, ”Урал батыр”—”Авеста” эпостарында уртаҡ мотивтар, генетик күренештәр төҫ-

мөрләнә. Мәҫәлән, тәү кешеләр — ”Авеста”лағы Йима, уның ҡатыны Йимак, Хума менән ”Урал батыр”-ҙағы Йәнбирҙе, Йәнбикә, Һомай араһында ла.

Арҡайым археологик ҡомартҡыһы йәнәштәге Арҡайым тауы атамаһы менән нарыҡланған. Бейеклеге 398 метр булған Арҡайым тауы Оло Ҡараған йылғаһынан һәм Арҡайым торағынан — өс-дүрт, Үтәгән йылғаһынан ике саҡырым арауыҡта ғына урынлашҡан. Серле атамалы тау Силәбе өлкәһенең топографик (эре масштаблы дөйөм географик) региональ атласында ла күрһәтелгән. Ар менән бәйле атамалар байтаҡ. Арал күлеҙиңгеҙе киң билдәле. Башҡортостанда Ар тауы, Ар йылғаһы, ар һүҙе менән башланған ауылдар бар. Йәнә беҙгә, башҡорттарға, тау арҡаһы, арҡа үҙәге, армыт-армыт тауҙар тигән һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләре аңлайышлы. Башҡорт халҡы мәҡәлендәге ”арҡа — билгә ҡеүәт” тигән һымаҡ, Арҡайым илгә, халыҡҡа ҡеүәт, рухи ҡөҙрәт бирер изге урынға әйләнде. Ҡайһы бер ғалимдар ”арҡа” һүҙенең һиндиран сығышлы булыуын һәм һыу, ут асылын аңлатыу ихтималлығын фаразлай. Археолог Нияз Мәжитов Арҡайым атамаһын арҡа еле иҫеүе менән бәйләй. Мәгәр, нисек кенә булмаһын, Арҡайым тигән тау бар, йәғни ысынбарлыҡ күҙ алдында.

Арҡайым һымаҡ тораҡтар үҙән йылғалары буйҙарындағы ҡалҡыулыҡтарҙа, тәбиғи сиктәр менән ситләнгән урындарҙа урынлашҡан. Ҡаласыҡтар йылға бөгөлдәре, әүәлге һыу юлдары, йырҙалары, йәиһә махсус ҡаҙылған каналдар менән



*Аркайым тауы картала күрһәтелгән*

уратылып алынған. Яҙғы мәлдә ярҙарынан ашҡан йылғалар, тауҙарҙан ағып төшкән гөрләүектәр үҙәнболондарҙы баҫҡан. Арҡайым кеүек ҡаласыҡтар һәр яҡтан йәйрәп ятҡан һыу уртаһында ҡалған. Йырҙаларға, каналдарға тулған һыу байтаҡ ваҡыт һаҡланған. Һуғарылған үҙәндә үлән яҡшы үҫкән. Ғалимдарҙың фекеренсә, донъя көткән урындың утрау һымаҡ торошта булыуы, һыу менән уратылыуы мәжүси, дини ритуал менән бәйләнгән. Донъяны мифологик ҡараштан ҡабул итеп, шуға ярашлы урын һайлап, ғаләм рәүешенә оҡшатып ҡорғандар. Арҡайымда һәм ”Ҡалалар иле”ндә астрономия донъяға ҡараштың, мифологияның, көнитмештең айырылмаҫ күренеше булғаны төҫмөрләнә. Арҡайымдарҙың донъя ҡоролошо, йыһан мөхитен күҙәтеүҙәре, күк есемдәренең барлыҡҡа килешен аңларға тырышыуҙары, төҙөлөшөн, үҙгәрешен, хәрәкәт ҡанундарын өйрәнеүҙәре, асыштары тураһында һөйләй.

Хәҙерге замандан дүрт мең йыл элек, бронза быуатында, тирә-йүне тауҙар менән уратылған үҙәндә тормош баҙлаған. Ағастан һәм тупраҡтан төҙөлгән нығытмалар ҡалҡып торған. "Ҡалалар иле"н ентекле өйрәнеүсе белгес Геннадий Зданович яҙғанса, төп һаҡланыу ҡоролмалары стеналарының нигеҙенең киңлеге — 5—5,5, өҫтәмә стеналарҙың һәм цитадель стенаһының киңлеге — 2—3, бейеклеге 3,5 метр самаһы тәшкил иткән. Стеналар балсыҡ ҡатыш эшләнгән блоктарҙан һалынған һәм бер ни тиклем таштар менән ҡатыштырылған. Нығытма ҡоролмаларҙың нигеҙе ғәҙәттә ағас бураларҙан йәки буйға һуҙылған һәм арҡырыға бүрәнәләр менән тоташтырылған ағас стеналарҙан ҡоролған. Стеналарҙың араһы еүеш балсыҡ йәки блоктар менән тултырылған. Тышҡы стена тирәләй тәрәнлеге — 2—3, киңлеге 4—6,5 метр киңлегендә ур (соҡор) ҡаҙылған һәм ситтәре ағас, балсыҡ менән нығытылған. Ғөмүмән, һаҡланыу өсөн ике ҡуласа-ҡоролма ҡоролған. Арҡайымдың тышҡы һаҡланыу стенаһының диаметры — 145, эске ҡуласа-ҡоролманың 85 метр булған. Бынан, цитадель стенаһынан астрономик күҙәтеүҙәр алып барылғандыр, тип фараз ителә. Һаҡланыу нығытмаларының эсендә бүлмәләр, бүлкәләр эшләнгәне һәм унда торлаҡ йорттарҙан үтеп булғанлығы ла асыҡланған.

Археологтарҙың билдәләүенсә, радиус йүнәлешендә дүрт стена тышҡы торлаҡтарҙы дүрт өлөшкә бүлә һәм шуға ярашлы ҡаласыҡҡа дүрт инеү урынын күрһәтә. Улар донъяның дүрт яғына ҡарай һәм төҙөлөшө буйынса ҡатмарлы ғына. Төп инеү урыны көнбайыш яғынан һәм уның һул ҡапҡаһы ғына түңәрәк урамға тура сыға, ҡалғандары лабиринт һымаҡ.

Арҡайымда һаҡланыу ҡоролмаларының өсөнсө линияһы ла төҫмөрләнә. Ул тупраҡ өйөмөнән күтәрелеп, Оло Ҡараған һәм Үтәгән йылғалары ярҙары буйлап ҙур майҙанды биләгән һәм, күрәһең, малтыуарҙы бағыу, һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән.

Түңәрәк ҡаласыҡтың уртаһында мөйөштәре донъяның дүрт тарафына ҡараған, төйөп тығыҙланған, тигеҙләнгән, дөрләп усаҡ янған дүрткел майҙан булған. Бында ышаныуинаныуҙарға бәйле йолалар үтәлгән, халыҡ йыйылып, көнүҙәк мәсьәләләрҙе тикшергән. Шундай ваҡыттарҙа майҙан амфитеатр һымаҡ тамаша урынына әйләнгән.

Арҡайымда торлаҡ йорттар ике түңәрәк тирәләй урынлашҡан. Археологик ҡаҙыныуҙар тышҡы түңәрәктә — утыҙ туғыҙ-ҡырҡ, эске түңәрәктә егерме ете ҡоролма (өй) булғанлығын күрһәтә. Киңлектәре алты-һигеҙ, оҙонлоҡтары егерме метрға еткән. Өйҙәр бер-береһенә терәлеп торған һәм дөйөм стеналары ла бер булған. Яҡтылыҡ өҫтән, түшәмдә уйылған уйымдарҙан төшкән. Ҡыҫҡа стеналарҙа ике сығыу урыны (ишек) яһалған. Береһе — ер өҫтөнә урамға, икенсеһе ҡаршы яҡтан түбәгә сыҡҡан. Ҡайһы бер урында һаҡланыу ҡоролмалары бүлмәләренә сығыу тишектәре уйылған.

Майҙаны 120-180 квадрат метр тәшкил иткән торлаҡ тәғәйенләнеше буйынса бер-нисә бүлеккә бүленгән. Ихатала соҡорло һыу ағыу канауы,

дөйөм бүлектә хужалыҡ итеү ҡоролмалары: мөгәрәп, ҡоҙоҡ, баҡыр иретеү мейесе урынлашҡан. Ял итеү бүлегендә ағас урындыҡ, һике булған. Мөйөштә йылытыу мейесе, йәнә һауыт-һаба торған.

Ҡаласыҡ урынлашҡан утрауҙың тышҡы биләмәләрендәге ҡәберлектәрҙә, ҡурғандарҙа башҡа хужалыҡ, тормош-көнкүреш, һуғыш ҡоралдары һәм кәрәк-яраҡтары ла табыла: көршәктәр, бронза балталар, ураҡтар, гарпундар, энәләр, төйгөстәр, һандалдар, металл ҡойоу ҡалыптары, һөңгөләр, башаҡтар... Хатта сбруй, ике тәгәрмәсле арба ҡалдыҡтары! Бындай арбалар сығышы буйынса һинд-иран ҡәүемдәренә ҡарай.

Арҡайымда көн күреүселәр төрлө кәсеп менән шөғөлләнгән. Төп шөғөлдәре — мал бағыу. Һөт, ит ашамлыҡтары әҙерләгәндәр, тире иләгәндәр, һөйәктән көнкүреш кәрәк-яраҡтары яһағандар. Балсыҡ көршәктәрҙә йөндән һәм үҫемлектәрҙән һуғылған туҡымаларҙың эҙҙәре һаҡланып ҡалған. Айырыуса йылҡысылыҡҡа ҙур әһәмиәт бирелгән. Аттар ҡышын тибендә йөрөгән, мал әйҙәүҙә, йөк ташыуҙа, юл йөрөүҙә, йорт-ерҙе һаҡлауҙа, ике тәгәрмәсле арбаларға егеп, дошман менән алыштарҙа файҙаланылған. Төрлө тоҡомло аттар үрсетеү, уларҙы өйрәтеү, егеү нәмәләре, хәрби арбалар йылҡысылыҡтың үҫеше тураһында һөйләй. Ҡаласыҡ йәнәшендәге ҡамалған биләмәлә мал-тыуар өсөн һыу яткылығы, лапаҫ һымаҡ ҡоролмалар ҙа булған. Хәүефле ваҡыттарҙа ҡуй-йылҡыны ошонда ҡыуып индергәндәр.





*Баҡырҙан, бронзанан һәм балсыҡтан эшләнгән кәрәк-яраҡтар*

Эске һыу яткылығына һыу дүрт йөҙ метр арауыҡтағы иҫке йырҙа буйлап йылғанан ағып килгән, унан Арҡайымдың көньяҡ, көньяҡ-көнбайыш биләмәһен ураткан йырҙа-каналға төшкән. Бынан һыу Арҡайым баҫыуҙары һәм баҡсалары арыҡтарына бирелгән. Эшкәртелгән, һуғарылған ерҙә, түтәлдәрҙә арпа, тары, һуған үҫкән.

Көньяҡ Урал, ”Ҡалалар иле” урынлашҡан төйәк файҙалы ҡаҙылмаларға, баҡыр мәғдәненә, аҫыл таштарға бай. Баҡыр иретеп, хеҙмәт, яу ҡоралдары яһау, күршеләр менән алыш-биреш итеү хужалыҡ тармаҡтарының, культураның үҫешенә булышлыҡ иткән. Арҡайымдар дан көршәкселәр, һауыт-һаба, металл нәмәләр яһаусылар булған. Мәғәнәле геометрик бил-

дәләргә, бормалы-һырмалы биҙәктәргә аң-зиһен, белем, оҫталыҡ, хистойҙо ла һалынған.

Арҡайымда йәшәүселәр таш та, ҡыҙҙырылған һәм һалҡын килеш металл да эшкәрткән. Вулкандан барлыҡҡа килгән тоҡомдарҙан сүкеш һәм һандалдар эшләгәндәр. Кварциттан һәм базальттан — һуғыш балталары, кремнийҙан һәм йәшмәнән — уҡ башаҡтары, энәләр. Шымартылған таштар һут һығыу, эсемлек әҙерләү өсөн дә ҡулланылған.

Археологик ҡаҙылмалар бронза дәүерендә йәшәгән ҡәүемдәрҙең матди һәм рухи донъяһын төшөнөргә мөмкинлек бирә. Улар өлгәшкән белем, ҡаҙаныш — бөтә донъяның ижтимағи үҫешенә һәм матди культураһының алға китешенә ифрат та тос өлөш.

Ошо урында шуға ла әһәмиәт бирәйек: Арҡайымдағы һәм ”Ҡалалар иле”ндәге дүрткел торлаҡтар, ҡаласыҡтың дүрт өлөшкә бүленеше, донъяның дүрт яғына ҡараған дүрт инеү урыны, мөйөштәре дүрт тарафҡа йүнәлгән ”мәңгелек уттар”, табыныу майҙаны символик мәғәнәгә эйә. Арҡысаҡ, әүернә рәүешендәге тамға ҡояштың, уңдырышлылыҡтың, киҫешкән йәшен уттарының, донъяның дүрт яғының һәм башҡаларҙың боронғо символы булыу ихтималлығы фаразлана. Ул орнамент мотивы һымаҡ боронғо, антик культураларҙа, урта быуаттарҙағы Европа сәнғәтендә осрай. Боронғо билдә башҡорт орнаментында ла һаҡланып ҡалған. Билдәле яҙыусы Таңсулпан Ғарипова әйтеүенсә, Баймаҡ районы Күсей ауылының боронғо зыяратында әүернә төшөрөлгән ҡәбер ташы ла бар. Был үҙе бер тарих. Шулай итеп, әүернә тамғаһы ғына ла башҡорттарҙың боронғо ҡанбабаларының арҙар һәм башҡа ҡәүемдәр менән тығыҙ аралашып йәшәгәнлеген, дөйөм культура булғанлығын раҫлай. Барсабыҙға шул да мәғлүм, фашистар Германияһы әүернәне дәүләт эмблемаһы (свастика), нацистар партияһының билдәһе итеп ҡулланды.

”Ҡалалар иле”н тикшереүселәрҙең һығымта яһауынса, хатта бик боронғо замандарҙа ла кеше үҙенең булмышын, ерҙәге урынын, йәшәү мәғәнәһен аңларға, донъяның, ғаләмдең дөйөм күренешен төшөнөргә ынтылған. Арҡайым кешелек ниндәйҙер хеҙмәт ҡоралы яһауҙан түгел, ә тирә-йүнгә ҡараш тыуыуҙан, әҙәм үҙен тәбиғәттең, донъяның, йыһандың бер өлөшө икәнен төшөнөүҙән башланыуы тураһында һөйләй. Ғөмүмән, кеше донъя күренешен, асылын өйрәнмәйенсә һәм аңламайынса йәшәй алмай. Был кешенең фекерләүенең психологик тәҡдире. Ғаләм иһә илаһи ҡөҙрәткә эйә. Ул бөтә тәбиғәткә, тереклек донъяһына йән һәм йәм бирә.

Боронғо кешенең уй-фекере бик аныҡ булған. Уның донъяны күҙаллауы, алыҫ йыһанға бағыу менән бергә, көн күргән урында, йәнәштә, ысынбарлыҡтағы нәмәлә, үрнәктә төҫмөрләнгән. Кеше ошонда, ер йөҙөндә, йыһан әйләнәһе түңәрәктәрендә, дүрткелдәрендә йәшәргә тейеш. Һинд-ирандар ғаләмде дүрткелдәрҙе үҙ эсенә алған түңәрәк рәүешендә күҙаллаған.

Һинд-европа мифологияһы буйынса, түңәрәк — күк (һауа) һәм ҡатын-ҡыҙ, дүрткел — ер һәм ир

башланғысы. Был башланғыстарҙың берлеге вә ҡаршылығы тораҡтарҙы планлаштырыуҙа, кеше ғүмеренә бәйле күренештәрҙә, йолаларҙа ла сағылған. Ғөмүмән, мифологияла тормош ысынбарлығы һүрәтләнә. Беҙҙеңсә, миф быуындан-быуынға күсә килгән тарихи йөкмәткеле хикәйә тигәнде аңлата.

Түңәрәк нығытмалар менән ҡамалған ҡаласыҡ үҙенә йомолған, донъянан айырылған кеүек. Был тәү ҡарашҡа ғына шулай. Ғәмәлдә ҡаласыҡтың төҙөлөшө, үҙенсәлектәре, архитектураһы киң даирәне үҙенә һыйҙырған, йәшәйеш мөхите ғаләмгә оҡшатылып, тәбиғәт, йыһан менән берлекте тойҙорған.

Ҡалҡыу урындағы ҡаласыҡ йомро, йәғни йомортҡа формаһында булған. Ошо әйләнмә буйынса түңәрәк нығытмалар, эске яғында дүрткел өйҙәр төҙөлгән. Ҡоролмаларҙы ҡороуҙа, төҙөү материалдарын ҡулланыуҙа айырмалыҡтар һәм үҙенсәлектәр булыуға ҡарамаҫтан, "Ҡалалар иле" ғәмәлдә бер этник культура донъяһын сағылдыра.

Йоморолоҡтоң асылы мифологияла ла сағылған. Һинд мифына ярашлы, иң тәүҙә, йәғни донъя барлыҡҡа килмәҫ элек, хаос, стихия булған. Һауа киңлектәре лә, күк тә, үлем дә, үлемһеҙлек тә булмаған. Елһеҙниһеҙ бер бөтөн генә һулыш алған. Барлыҡҡа килтереүгә һыуҙар башланғыс, яралғы биргән. Һыуҙың ҡуйырыуынан йомортҡа хасил булған, йыл буйы тулҡындарҙа тибрәлгән. Шунан һуң ике өлөшкә: ергә һәм күккә бүленгән.

Алда телгә алыуыбыҙса, "Ҡалалар иле"ндә һаҡланыу нығытмалары йомортҡа рәүешендә ҡоролған. Шуға ярашлы түңәрәктәр, дүрткелдәр... Йомортҡанан иһә ер һәм күк яралған. Йыһандың тыуыуы тураһындағы дөйөм миф инә ҡарынында бәпес яралыуға һәм бала тыуыуға бик оҡшаш. Байтаҡ белгестәр, тарихсылар, медиктар, психологтар был мифҡа бәйле боронғо кешеләрҙең үҙҙәренең башланғыс, яралғы хәлен, йәғни тыуғанға хәтлемге хәлен хәтергә төшөрөү мөмкинлеген инҡар итмәй.

Һыуҙың ҡуйырыуынан йомортҡа хасил булған кеүек, Ҡөрьән сүрәһендә әйтелгәнсә, кеше лә бер тамсы һыуҙан, шыйыҡсанан ярала. Академик Николай Макаровтың яҙыуынса, тәбиғәттә һыуҙан да серлерәк матдә юҡ. Уның үҙе өсөн хас үҙ ҡанундары. Уға билдәләнгән мәғәнә һалынған. Ниндәй икәнен беҙ әлегә белмәйбеҙ. Әммә һыуҙың һирәк осрай торған үҙенсәлектәргә эйә булыуы бәхәсһеҙ. Үле һыу бөтә нәмә башта нисек булғанын хәтерләй, тере һыу иһә тормош нисек барырға тейешлеге тураһында мәғлүмәт бирә. Халыҡ ижадында үлтерелгән батырға тәүҙә үле һыу, йәғни хәтерле һыу һөртәләр. Йәрәхәттәр бөтәшә. Шунан тере һыу бөркәләр, эсерәләр. Ул ғүмер, тормош барышы тураһында мәғлүмәт бирә һәм кешегә йән керетә.

Әлбиттә, хәҙер лаборатория ысулы менән алынған тере һәм үле һыу тәбиғи илаһи һыу үҙенсәлектәренә тулыһынса эйә түгел. Һыуҙың бөтә ҡеҙрәтен, тылсымын асыу өсөн әлегә аң-зиһен етмәй. "Мин шуға ышанам: ҡасан да булһа беҙ бөтә үҙенсәлектәрҙе лә асасаҡбыҙ, — ти академик Николай Макаров. — Тәьҫире әкиәттәгеләй иҫ кит-

кес булмаһа ла, үле һәм тере һыу алырға барыбер өлгәштек бит. Был әкиәтме ни? Шуға иманым камил: әкиәт буш ерлектә тыумаған...”

Миф буйынса, хаостан һыуҙа ғаләм, кеше яралған. Әҙәм заты йылғалар, күлдәр, йәғни һыу солғанышында үҙҙәренең Арҡайымын, ”Ҡалалар иле”н — ер йөҙөндәге Йыһан менән бәйле донъяларын ҡорған. Шуның менән бронза быуаты кешеләре ерҙә ғаләмгә хас үҙенсәлектәрҙе ҡайтанан тергеҙгән. Был асылды һаҡлау, тәбиғи хәлде, башланғысты, төп мәғәнәне ғәмәлләштереү, дауам итеүҙе аңлата. ”Ҡалалар иле”н тикшереүселәрҙән Геннадий Здановичтың фекеренсә, Арҡайымды ҡороу — ул һаҡланыу стеналары, торлаҡ төҙөү генә түгел, ә үҙенсәлекле ритуал: төҙөүселәр ғаләмде, Йыһанды яңынан синтезлаған (дөйөмләштергән), уның барлыҡҡа килеүенең һәм үҫеүенең бөтә этаптарын ҡабатлаған. Әүәл, мифик осорҙа ҡайһылай булған, шулай ҡабатларға тырышҡан.

Арҡайым ҡәүеме өсөн түңәрәктәр төп геометрик символ һаналған. Улар артында йыһан сфералары һәм инә (ҡатын-ҡыҙ) башланғысы торған. Түңәрәктәр дүрткелдәрҙе, йәғни ерҙе һәм уның ир өлөшөн ураткан. Арҡайымдың планы мәшһүр ”Авеста”-ла тасуирланған ергә (вара) оҡшаған. Ул — төлөк, ышыҡ ер, йәғни ғәҙел һәм тоғролоҡло кешеләр торған урын. Ул хаос һәм үлем көстәренә ҡаршы тора. Ахурамазданың ҡушыуы буйынса вараны арийҙар илендә Имо батыр хасил иткән.

Тарихтан мәғлүм булыуынса, ун ике мең күн пергамент битендә алтын онтағы ҡушылған буяу менән яҙылған китаптар — ”Авеста” яҙылып бөтөп, һаҡлауға һалынғас, Зәрдөшт төрлө ерҙәрҙә Изге уттар тоҡандырырға һәм уларҙы һаҡларға ҡуша. Руханиҙарға бағышланған Ут бағыусылар усағы Хорасанда (аҙаҡ Ҡабулға күсерелә), Һуғышсылар усағы Урмия күле буйында, Аснаванд тауында, Эшсе кешеләр усағы Раэванд тауында, Совар күле тирәһендә тоҡандырыла.

Арҡайымда һәм ”Ҡалалар иле”ндә табылған матди ҡомартҡылар ”Ригведа” һәм ”Авеста” рухи мираҫында, дөйөм һинд-европа мифологияһында тасуирланған йолалар, күренештәр, йәғни әйберләтә булған нәмәләрҙе яҙма сығанаҡтар менән сағыштырырға мөмкинлек бирә. ”Авеста” буйынса үҙәк — баҙлап янған ут, икенсе түңәрәк — кешеләр, өсөнсө түңәрәк мал өсөн тәғәйенләнгән. Иран ҡомартҡыһында тасуирланған был күренеш Арҡайымға тап килә. Арҡайым ҡаласығының уртаһында — майҙан. Унда фәҡәт оҙаҡ йылдар буйына янған усаҡтарҙың эҙҙәре генә ҡалған. Майҙан кешеләрҙең табыныу урыны булған. Үҙәк, ”мәңгелек уттар” тирәләй төҙөлгән торлаҡтарҙа йолаларҙы атҡарыусылар (жрецтар), һуғышсылар торған. Икенсе ҡуласалағы торлаҡтарҙа — иркле берекмәләргә берләшкән ғаиләләр. Мал-тыуар иһә һаҡланыу нығытмаларының икенсе ҡуласаһы тышында тотолған. Ғәҙәттә, бөтә дәүерҙәрҙә мал өсөн кәртә-аҙбар уртала булған, сөнки далала һыйыр, ҡуй, йылҡы — төп байлыҡ.

Ғәжәп, мәгәр Арҡайымда кеше үҙе иң ҙур байлыҡ һаналған, бында бөтәһе лә фәҡәт уның яйлы көнитмеше, хатта ки уңайлы рухи һәм сәләмәт торошо өсөн ҡоролған. Кеше үҙ ҡәҙерен үҙе арттырған. Әйткәнебеҙсә, арҙар (арийҙар) — арыу, шәп кешеләр бит.

"Ҡалалар иле" ҡәүеме йәшәгән ерҙәрендә ғаләмдең өлгөһөндә түңәрәктәр, дүрткелдәр яһап, донъя ҡороп, аһәңле йәшәйешкә ынтылған. Ер менән Йыһан бәйләнешен, ярашлығын, килешлеген, тәбиғәт гармонияһын боҙмаған. Затнәҫелдәр, яңы быуындар ҡанбабалар ҡарашын, йолаһын изге һанаған, ҡәҙерләгән һәм үҙҙәренең йәмғиәте төҙөлөшөндә ҡулланған. Бында бөтә нәмә илаһи йолаға, ғаләм ҡоролошона ярашлы һәм фәһемле. Арҙар үҙҙәренең рухи ҡиммәттәрен бик ентекләп ғәмәлләштергән һәм һаҡлаған. Был хәҙерге быуындар өсөн аҡыл һәм һабаҡ алырлыҡ үрнәк.

Ҡаҙыныу-тикшеренеү эштәре барышында Арҡайымда һәр торлаҡта ҡоҙоҡтар булғанлығы билдәләнә. Ҡайһыларында хатта икешәр ҡоҙоҡ. Шуныһы ғәжәп: йәнәштәрендә генә баҡыр иретеү мейестәре урынлашҡан. Археологтар аптырашта ҡала: ни өсөн, ни сәбәптән ҡоҙоҡ ауыҙы эргәһендә мейес? Бының ғилләһе булырға тейеш? Тора-бара мейестәрҙең һәм ҡоҙоҡтарҙың йырыҡтар, йәғни каналдар менән тоташтырылыуын, уларҙың өргөс икәнен асыҡлайҙар. Дымлылыҡ, температура айырмаһы махсус күректәр ҡулланмайса мәғдәндән баҡыр иретергә мөмкинлек биргән. Был мейескә һауа өрҙөрөүҙең бик тә ябай, тәбиғи, мәгәр оло аҡыл менән хәл ителгән ысулы.

Ҡоҙоҡтар төбөндәге табыштар ҙа көтөлмәгән булып сыға. Бында аттарҙың, һыйырҙарҙың баш һөйәктәре, йорт хайуандарының тояҡтары табыла. Улар ҡоҙоҡ стенаһы тирәләй махсус рәүештә һалынған һәм ҡаҙыҡсыҡтар менән нығытылған була. "Кемгә, нимәгә ҡорбан килтерелгән икән?" — тигән һорау тыуа. Ҡалдыҡтар бик ентекләп тикшерелә. Ҡоҙоҡ төбөнә һалыныр алдынан баш һөйәктәре, тояҡтар һәйбәтләп яндырылған һәм көйҙөрөлгән. Был күренеш ут барлыҡҡа килеү тураһындағы һинд-европа мифын һүрәтләндерә.

Миф буйынса, Ут аллаһы һыуҙан яралған. Был туҙға яҙмаған һүҙ, кеше ышанмаҫлыҡ хәбәр кеүек. Шулай ҙа ер-һыу, донъяның барлыҡҡа килеүе тураһындағы боронғо халыҡ хикәйәттәрендә ниндәйҙер хикмәт, мәғәнә барҙыр бит. Дошман дуҫтан ярала, тигән әйтем дә бар. Ут аллаһы ҡәҙимге һыуҙан түгел, ә ниндәйҙер ҡара, серле һыуҙан тыуған. Арҡайымдағы һәм "Ҡалалар иле"ндәге асыл-асыштар шуны күрһәтә: Ут аллаһы ер аҫты һыуҙарынан, ҡоҙоҡ һыуҙарынан бар булған. Ҡоҙоҡ утты өрөп шул хәтле ҡыҙҙыра, ҡеүәтләндерә, хатта ки ул ташты, металды иретә. Шулай итеп, ҡоҙоҡтоң ҡара һыуҙары Ут аллаһын тыуҙыра. Ҡоҙоҡ төбөнә яндырып, көйҙөрөп һалынған ҡорбан да Ут аллаһына тәғәйенләнә.

Арҡайымда йәшәүселәр утты изгеләштергән, утҡа ла табынған. Арҡайым зәрдөштилек дине хасил

булғанға, уның ҡанундары йыйылмаһы ”Авеста” яҙылғанға ҡәҙәр байтаҡ элек барлыҡҡа килгән. Бында зәрдөштилекте хасил иткән мөхит төҫмөрләнә. Әйткәнебеҙсә, зәрдөштилектең дә төп дини йолаһы — ут. Баш аллаһы Ахурамазда иһә — изгелектең, яҡшы башланғыстың кәүҙәләнеше.

Кеше менән тирә-яҡ мөхит донъяһы изге мөнәсәбәткә ҡоролған. Әҙәм балалары тәбиғәт менән килешеп йәшәгән, уның ҡанундарын һаҡлаған. Төҙөү, яһау, булдырыу, ижад итеү тәбиғәтте боҙмаған. Боронғо ышаныу-инаныуҙар, дин дә шуға инандырған. Арҡайымда ла тирә-яҡ мөхит, тәбиғәт менән бәйләнеш, мөнәсәбәт яҡын туғандарса булған. Тикшерелгән культура ҡатламы таҙалығы менән айырылып тора. Меңәр йылдар үткәс тә был ер — тәү асылында.

Үҙенә хас туғайҙары, ҡалҡыулыҡтары, тупрағы, һыуы, үҫемлектәре, тереклек донъяһы булған ерҙәргә арийҙар ипле эш итеп кенә, һаҡлыҡ менән генә балсыҡ һәм ағастан үҙҙәренең торағын, ”Калалар иле”н төҙөгән. Бының өсөн, әлбиттә, соҡорҙар ҡаҙырға тура килгән. Сығарылған тупраҡ, балсыҡ нығытыу ҡоролмалары, ҡорамалар төҙөү өсөн файҙаланылған. Ҡаҙылған ер, балсыҡ ғәмәлдә төҙөлөшкә киткән тупраҡ миҡдарына тиң булған. Был шуны аңлата: кешеләр күсеп киткәс, тораҡ бөткәс тә был ер тәбиғи хәленә ҡайтҡан. Кеше үҫемлектәрҙе, тереклекте, һыуҙы, бөтә ерҙе ололаған, хөрмәтләгән, изге күргән. Хәҙер ышанмаҫлыҡ, мәгәр Арҡайымда таҙартыу ҡоролмалары, канализация булған. Бында керле нәмәне яҡшылап таҙартҡандан һуң ғына һыуға һалып йыуғандар. ”Авеста”ла ла: ”Бысраҡ әйберҙе һыуға тыҡҡансы һыуҙың таҙалығын уйла”, — тиелә. Тирә-яҡ мөхиткә шундай аңлы, һаҡсыл мөнәсәбәт әле беҙ ғүмер иткән төйәктә дүрт мең йыл элек булған. Хәҙер иһә кеше үҙен ғаләмдең бер өлөшө икәнен аңлаһа ла, тирә-яҡ мөхитте үҙ мәнфәғәттәре өсөн генә файҙалана, эшмәкәрлеге тәбиғәт ҡанундарын боҙа, тәбиғәтте һәләк итеп, үҙен дә һәләкәткә илтә. Әлеңге рухи, әхлаҡи, экологик, энергетик торғонлоҡ нәҡ шул хаҡта һөйләй. Эскән һыуыбыҙ, һулаған һауабыҙ — ыулы, зарарлы, халыҡ — ауырыу. Сөнки беҙ ерҙе, ғаләмде һанға һуҡмайбыҙ, ҡәҙерләмәйбеҙ.

Арҡайым һәм ”Ҡалалар иле” тураһындағы археологик яҙмаларында Геннадий Зданович шундай һығымта яһай: ”Беҙҙең замандың иң яҡшы аҡыл эйәләре постмодернизм донъяһының көрсөктәренән сығыу юлдарын эҙләп, кешелек культураһының иң боронғо ҡатламдарына мөрәжәғәт итә. Әҙәм заты неолит (таш быуаттың һуңғы осоро), бронза дәүерҙәрендә үк ижтимағи үҫештең ҙур һәм күп яҡлы тәжрибәһен туплаған. Күрәһең, беҙҙең цивилизация тарих билдәләгәндең иң яҡшыһы түгел. Моғайын, башҡа юлдар ҙа булғандыр. Арҡайым беҙҙең юрауҙарҙың, уйхыялдарҙың аҫтын өҫкә килтерә, тарихи үҫештең альтернатив юлдарына йүнәлергә әйҙәй, хәҙерге кешелек донъяһының ҡаҙаныштарына һәм яңылышлыҡтарына быуаттар төпкөлөнән бағырға мәжбүр итә...”

Рухи асылды белергә, сығанаҡтарҙы төшөнөргә, илаһи ҡөҙрәт менән һуғарылырға меңәрләгән-меңәрләгән кеше Арҡайымға — Көньяҡ Урал Мәккәһенә, Кеше һәм Тәбиғәт музейына — йөрәкһенеп, өмөтләнеп килә. Археологтар, тарихсылар, сәйәсмәндәр, тәбиғәт, сәнғәт, мәҙәниәт белгестәре, мосолман, христиан, буддизм диндәре әһелдәре... Сөнки Арҡайым ғаләмдең, донъяның, кешелектең асылын, замандар, быуындар бәйләнешен тойҙорған, хәтерҙе яңыртҡан, тормошобоҙҙо нисек ҡорорға тейешлекте аңғартҡан үле лә һәм тере лә һыулы сығанаҡ, рухи үҙәк.

Әүәл ҡәүемдәрҙең сығышы, дөйөм көнкүреше, культураһы ағас рәүешендә күҙалланған. Башҡорт ырыуҙарының үҙ ағасы, ҡошо булған, нәҫел-ырыуҙың килеп сығышын, тармаҡланыуын шәжәрә ағасы күрһәткән. Геннадий Зданович образлы һәм фәһемле итеп әйткәнсә: ”Айырым культураларҙы ла ағас ҡулсалары менән сағыштырырға мөмкин. Олондағы һәр артабанғы ҡулса, түңәрәк айырылып тора һәм үҙаллы һымаҡ. Мәгәр уның үҫеше башҡа ҡулсаларҙың үҫешенә, ағас тамырҙарының һутына бәйле. Ҡулсаларҙың иртәрәкме, һуңыраҡмы барлыҡҡа килеүе мөһим түгел. Боронғо ”ҡулса”ның, түңәрәк торлаҡтың береһен — Арҡайымды тергеҙеп, беҙ уның аша хәҙерге донъяға ла йәшәү һутын үткәрәбеҙ, тормош ағасының бөтә олонон, тармаҡтарын һауыҡтырабыҙ”.

Боронғо Арҡайым цивилизацияһы, ҡанбабаларҙың тирә-яҡ мөхит, ғаләм менән бөтә йәһәттән ярашып, килешеп йәшәүе хәҙерге булмышыбыҙ, тормошобоҙ, яҙмышыбыҙ тураһында тәрән уйҙарға һала. Беҙ, ”Ватандаш” журналының баш мөхәррире Фәрит Вафа улы Әхмәҙиев, Арҡайымды күрһәтеп, һөйләп йөрөүсебеҙ тарих фәндәре кандидаты Әлим Барый улы Зарипов, тәрән хистәр кисереп, Оло Ҡараған, Үтәгән йылғалары үҙәнендә йөрөгәндә, йөрәкһенеп тирә-йүнгә тауҙарынан баҡҡанда, күңелебеҙҙә: ”Аһәңле йәшәү хәҡиҡәтен ер йөҙөндә көн иткән барса халыҡҡа һеңдерергә ине!” — тигән уй ҡоштай талпынды, ”Урал батыр” ҡобайырындағы ошо юлдарҙы оран кеүек әйтке килде:

Бар халыҡты эйәртеп,
Урал юлға сыҡҡан, ти;
Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын һөҙөп алған, ти;
Үҙе сапҡан юлына,
Дейеүҙән өйгән тауына
Һыуҙы алып һипкән, ти.
”Тау буйҙары йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаған,
Халҡы йырлап хуплаған,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары күреп һоҡланған
Ил һөйөргә ил булып,
Ер һөйөргә бағ булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып
Балҡып торған ер булһын!”
Тигән һүҙен әйткән, ти.

Арийҙар тирә-яҡ мөхитте изгеләштергән, тәбиғәтте иң яҡын туған итеп күргән кеүек, Урал да ”Ил булып, Ил һөйөргә, бағ булып, Ер һөйөргә” өндәгән.

Арҡайымдың ижтимағи, рухи донъяһы ла беҙҙең өсөн тәү атабыҙ Урал тапҡан йәншишмә, тирәяҡты йәшәртер тере һыу кеүек.